# Башkортостандың халыk яҙыусыһы З.Биишеваның тормошо һәм ижадын өйрәнгәндә мәғлүмәти технологиялар kулланыу

*Кәримова Гөлнара Яхъя kыҙы,*
*Туймазы педагогия колледжының башkорт теле уkытыусыһы*

«Кеше ғүмере – аҡҡан һыу. Шул ағышта һин үҙ булмышыңды күрһәтә алдыңмы, халҡым тип яндыңмы, хеҙмәтеңә һалған көс-ғәйрәтеңдән, аҡыл-зиһенеңдән сатҡылар тамдымы, атҡарған эшеңдән күңелең ҡандымы? Бына ошо һорауҙар кеше ғүмеренә баһа биреүсе төп алымдарҙың береһелер»

Р. Аҙнағолов.



«З. Абдулловна кеүек шәхестәр халыҡтың һүҙ сәнғәтенә яңы гәүһәрҙәр генә өҫтәп ҡалмай, унын алдына яңы бурыстар ҡуя, ҡыуандырып ҡына ҡалмай, уйландыра, күңелдәргә йәм менән бергә ғәм өҫтәй, ил хәстәре менән йәшәргә өйрәтә»

Р.Бикбаев

# 3.Биишеваның «Башҡорт теле» шиғырын өйрәнеү дәресендә ҡулланылған презентация

**Дәрес темаһы:**
**«Бейек осоштарға ҡанат ҡуйыр Зәйнәб Биишева мәктәбе...»**
17-се төркөмдә дәрес



**Дәрес маҡсаты:** Зәйнәб Биишеваның «Башҡорт теле» шиғырының идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү; шиғырҙы тасуири уҡырға өйрәтеү; йәштәргә туған телде белеүҙең әһәмиәтен күрһәтеү; башҡорт теленә һөйөү тәрбиәләү.



*«Башkорт теле» шиғырын*
*өйрәнеү дәресендә kулланылған презентация*

*Дәрес темаһы:*



Дәрескә эпиграф:

Туған телен

kәҙерләгән халыk

kәҙерле булыр

Мәkәл

*«Башҡорт теле» шиғырын*
*өйрәнеү дәресендә ҡулланылған презентация*




- Зәйнәб Абдулла ҡыҙы Биишева 1908 йылдың 2 ғинуарында Башҡортостандың хәҙерге Күгәрсен районы Туйымбәт ауылында крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килгән. Ауыл мәктәбендә уҡығандан һуң,
- 1924-1929 й. ул Ырымбурҙағы башҡорт педагогия техникумында уҡый.
- 1929-1931 й. Баймаҡ районы ауылдарында уҡытыусы булып эшләй.
- 1931-1934 й. - Башҡортостан китап нәшриәте мөхәррире
- 1934-1951 й. төрлө гәзиттәрҙә редакторлыҡ вазифаһын башҡара.

*«Башҡорт теле» шиғырын өйрәнеү дәресендә ҡулланылған презентация*

## *Шиғыр төрҙәре:*

- шиғыр-монолог
- шиғыр-диалог
- шиғыр-өндәшеү

***«Башҡорт теле» шиғырын өйрәнеү дәресендә ҡулланылған презентация***

- ***Тасуири уҡыу саралары:***

- Пауза
- Баҫым
- Тиҙлек
- Тон
- Тауыш
- Һулыш
- Дикция
- Интонация

***«Башkорт теле» шиғырын өйрәнеү дәресендә kулланылған презентация***

# *Пауза*

- ***Пауза*** *тип уkығанда йәки һөйләшкәндә туkтап тороу атала.*

***Пауза төрҙәре:***

- Логик пауза
- Психологик пауза

***Паузалар төрлө оҙонлоkта була:***

- kыҫkа
- уртаса
- оҙон пауза

### *«Башkорт теле» шиғырын өйрәнеү дәресендә kулланылған презентация*

## *Баçым*

- ***hүҙ баçымы*** - hүҙ эсендә көслө тауыш менән әйтелгән ижек. Ғәҙәттә, башkорт телендә баçым ***аҙаkkы ижеkkә*** төшә.

***Шулай уҙа*** баçымдың hуңғы аффикстар алдындағы ижеkkә төшkән осраkтары бар. Улар:

- Исемдең хәбәрлек категориялары аффикстары (шатмын)
- юkлыk аффикстары (hуңлама)
- hорау киçәксәләре (килдеме)
- дай/-дәй ялғауҙары (тауҙай)

***«Башkорт теле» шиғырын өйрәнеү дәресендә kулланылған презентация***

# *Логик басым*

- ***Логик басым*** – тыңлаусының иғтибарын йәлеп итеү өсөн һөйләм эсендәге мөһим һүҙҙәрҙе айырым интонация менән әйтеү.

***Логик басым төрҙәре:***

- Бәләкәй басымлы һүҙ
- Уртаса басымлы һүҙ
- Ҙур басымлы һүҙ
- Ныk мәғәнәле әйтелгән һүҙ

# Дәрес аҙағында студенттар яһаған һығымта





З.Биишева – башҡорт телен ысын күңелдән һөйгән, уның бөтә нескәлектәрен белгән шағирә. Шундай шәхестәр булған өсөн дә туған тел юғалмай. Ул ихтирамға лайыҡ бөйөк кеше.

Мәҡәлде үҙгәртеп әйтһәк, «Туған телен ҡәҙерләгән кеше ҡәҙерле булыр» килеп сыға. Был һүҙҙәр нәҡ шағирә хаҡында һымаҡ. Шулай булғас, беҙҙең халыҡты хөрмәт итһендәр өсөн, иң беренсе телебеҙҙе ҡәҙерләргә кәрәк.

З.Биишева тормошо һәм ижады буйынса студенттарҙың үҙ аллы презентация әҙерләүе





## *1-се этап*

*-студенттар үҙ аллы башҡарыу өсөн темалар һайлай,*
*-презентацияларға ҡарата талаптар һәм баһалау критерийҙары менән таныша.*

*Баһалау критерийҙары*

- Теманың асылыуы, өҫтәлмә белем биреүе, тәрбиәүи әһәмиәткә эйә булыуы
- Сценарий йөкмәткеһе, композицияһы, оригиналлеге
- слайдта төрлө материалдарҙы (йыр, рәсем, һынлы сәнғәт, фольклор һ.б) ҡулланыу
- Биҙәлеше, презентацияның сифаты
- Проектты яҡлау
- Яҙма текстарҙа һәм һөйләү телмәрҙә хаталарҙың булмауы

*Артабан тема буйынса өҫтәлмә мәғлүмәт туплай:*

- яҙыусы биографияһын тулыраҡ өйрәнә,
- иҫтәлектәр менән таныша, цитаталар яҙып ала,
- З.Биишеваға арналған шиғырҙарҙы йыя,
- китаптарҙан, интернет селтәренән әҙиптең фоторәсемдәрен таба,
- темаға ярашлы әҙиптең шиғырҙарын һайлай,
- теманы асырҙай йырҙар, мәҡәлдәр, көйҙәр эҙләй һ.б.

*Бөтә йыйылған материалдар электрон папкаға туплана*

## *2-се этап*

- презентацияның композицияһын уйлайҙар, сценарий төҙөйҙәр.
- слайдтың һанын, унда ҡуйыласаҡ иллюстратив материал, комментарий, текст материалдарын һайлайҙар.

*Был эштәр студенттың ижади һәләттәрен үҫтерә. Текстарҙың башҡорт телендә яҙылыуы уларҙың грамоталылығын арттыра.*

## *3-сө этап*

*Power Point программаһы технологияларына ярашлы презентация әҙерләнә:*

- шаблондар, слайдтар макеты,
- фон,
- анимация,
- бер слайдтан икенсе слайдҡа күсеү эффекттары,
- көй, графика һайлана

## *4-се этап*

- презентацияға таянып үҙҙәренең темалары буйынса башҡорт телендә сығыш яһарға әҙерләнеү,

- ижади отчет дәресендә эштәр менән танышыу,

- уларға баһалау өсөн махсус карточкаларға таянып балдар ҡуйыу, тәҡдимдәр әйтеү.

*З.Биишева исеменең бөгөнгө көндә онотолмауы хаҡында студент Хөсәйенова Н. презентацияһынан өҙөк*

**“Мин рухымдың аҫыл хазинаһын, илем, һиңә биреп ҡалдырҙым…”**






*Студент Хөсәйенова Н. презентацияһынан өҙөк*

# *Музейҙар яҙыусы рухын һаҡлай*

БДУ-ның Стерлетамаҡ филиалында яҙыусыға арналған музей





Зәйнәб Биишеваның тыуған ауылындағы йорт-музейы





*Студент Хөсәйенова Н. презентацияһынан өҙөк*

## 2008 йылда Башҡортостан Республикаһының «Китап» нәшриәтенә Зәйнәб Биишева исеме бирелде

Зайнәб Биишева исемендәге «КИТАП» нәшриәтенә
Издательству «КИТАП» имени Зайнаб Биишевой
90 йыл лет



*Студент Хөсәйенова Н. презентацияһынан өҙөк*

## *Күгәрсен районы халҡы уның менән хаҡлы рәүештә ғорурлана*




Мораҡ ауылында З.Биишева исемедәге урам



З.Биишева исемендәге премия булдырҙы



Мәктәп З.Биишева исемен йөрөтә

*Был эштәрҙе башҡарыу мәлендә*

- йәштәрҙә Зәйнәб Биишева шәхесе һәм ижадына ҡарата ихтирам тойғоһо тәрбиәләнә
- студенттарҙың башҡорт теле буйынса яҙыу, һөйләү күнекмәләре үҫә,
- компьютер программалары менән эшләү оҫталығы арта,
- әҙәбиәт, сәнғәт, фольклор кеүек төрлө өлкәлә белемгә эйә була,
- ижади һәләттәре асыла.

Ниндәй генә һүҙҙәр
эҙләһәм дә
Әҙҙәр һеҙгә — оло
әсәгә.

Ижадығыҙ,
Шанлы ғүмерегеҙ-
Тере һәйкәл
гүзәл йәшәүгә.

Кәҙим Аралбай

